

*Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА*

# Даръялай акты йыр

Башҡортостандың иң тәүге халыҡ артисы, башҡорт операһына, музыкаль балладаһына нигеҙ һалыусы, башҡорт музыкаль сәнғәтен үҫтереүгә баһалап бөткөһөҙ өлөш индереүсе шәхестәребеҙҙең береһе Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов 1895 йылдың 28 октябрендә Көйөргәҙе районының Мораптал ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Буласаҡ йырсы, композиторға әсәһе Ғәлимә апай ҙур йөгонто яһай. Ул бик матур моңло тауышлы, бик нәзәкәтле итеп халыҡ йырҙарын башҡарыр була. Кескәй Ғәзиз һәр бер башҡорт йырының үҙенең тарихы, тормошсан легендаһы булыуы тураһында тәү тапҡыр әсәһенән ишетә, уларҙы йотлоғоп тыңлай, эстән генә ҡабатларға ярата. Күңеле йырға, моңға тартым.

Бәхет эҙләп ситкә, Ташкент яҡтарына сығып киткәндә, әсәһе уға ҙур өмөттәр бағлап, изге теләктәр менән һағышланып оҙатып ҡала:

– Үҙеңде һаҡла, тауышыңды һаҡла! Һин ҙур әртис булып китеүең дә бар. Исән-һау бул!

Аҙаҡ йырсы үҙе: «Әсәйемдең һүҙҙәре минең ҡолағымда гел яңғырап торҙо. Бәлки шуғалыр ҙа мин тауышым менән бик һаҡ ҡыландым һәм, профессиональ музыканттар ярҙам итмәһә лә, уның мутацияһын еңел үткәреп ебәрҙем»,– ти.

1909 йылда Ғәзиз бер туған ағаһы менән Ташкентҡа килә. Ғабдрахман ағаһы менән сауҙагәрҙәргә эшкә яллана. Йәй көндәрендә Ғәзиз йөҙөм баҡсаларында эшләй, ә ҡыштарын мәҙрәсәлә, мәктәптәрҙә белем ала.

Ташкентта башҡорт, татар йәштәре менән аралашып, шунда тәү тапҡыр сәхнәгә баҫа, йырсы булып таныла. Төрлө халыҡтарҙың музыкаль сәнғәте менән ҡыҙыҡһына, репертуарын киңәйтергә тырыша, дөйөм үҫеш кимәлен күтәреү өҫтөндә эшләй, күп уҡый. Уның тауышы сағыу альттан көслө һәм ағымлы, йомшаҡ тенорға әйләнә.

1914 йылда ун туғыҙ йәшлек Ғәзиз Әлмөхәмәтов Үзбәкстанда йырсы булып таныла, шунан Себер, Волга буйы, Башҡортостан, Татарстан буйлап гастролдәргә сыға, халыҡ менән яҡындан аралаша, һәр ерҙә йырсы оҫталарҙан башҡорт йырҙарын яҙып ала, уларҙың нисек килеп сығыуы, ҡайһы яҡтарҙа таралыуы, кемдәр башҡарыуы хаҡында мәғлүмәттәрҙе дәфтәренә теркәй, уларҙан үҙе лә өйрәнә. Мәҫәлән, «Тормош» гәзите башҡорт йырсыһы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың 1916 йылдың йәйендә Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта үткән гастролдәре тураһында яҙа. Ғәзизде тыңларға яратҡан тамашасыларҙы һәр саҡ уның вокаль оҫталығы хайран ҡалдыра. Йыш ҡына оҫта башҡарыусының кемдән йырларға өйрәнеүе тураһында һорашалар. «Йырларға мин үҙ халҡымдан өйрәнәм», — тип әйтергә яратыр булған ул. Үзбәкстанда йәшәү һәм йыш ҡына гастролдәргә сығыу уны үзбәк, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, татар халыҡтарының үҙенсәлекле музыкаһы менән дә яҡынайта. Ғәзиз Сәлих улының музы-

каль үҫешенә шулай уҡ рус музыкаһы һәм уның арҙаҡлы башҡарыусылары ла ҙур йоғонто яһай. Бер саҡ уға Мәскәүҙә аттестацион комиссия алдында сығыш яһарға тура килә. Бөйөк рус теноры Леонид Собинов уға былай тип әйтә: «Һеҙҙә тәбиғәттең үҙе тарафынан ҡуйылған иҫ киткес матур тауыш». Ошо йырсының йоғонтоһо аҫтында Әлмөхәмәтов үҙенең репертуарына П. И. Чайковскийҙың «Евгений Онегин» операһынан Ленский арияһын, Вердиҙың «Риголетто» операһынан герцог йырын һ.б. индерә. Был арияларҙы урыҫса ғына башҡарып ҡалмай, башҡорт тамашасылары өсөн үҙе тәржемә итеп башҡортса ла йырлай.

Ғ. Әлмөхәмәтов 1917 йылдың аҙаҡтарында Ырымбур ҡалаһына килә. Бер аҙ ваҡыт Ырымбур музыка мәктәбендә белем ала. Ошо мәлдә «Ҡармаҡ» сатира журналында эшләүсе Шәйехзада Бабич менән дуҫлаша. Улар йыш ҡына бергә сығыш яһай. Кисәне конферансье булып гәҙәттә Шәйехзада Бабич алып бара. Улар сәхнә кумирына әйләнә: береһе моңо менән, икенсеһе һүҙ оҫталығы менән.

1921 йылда Ташкентҡа Ҡазандан йырсылар һәм музыканттар килә. Ғәзиз Әлмөхәмәтов улар менән берлектә бер нисә концерт бирә һәм Бакуға гастролгә китә. Ғәзиз ағайҙың ҡатыны Мәстүрә апай шулай тип иҫкә алған: «Иҫемдә, Бакуҙа концерт ҡуйғанда, халыҡ йырҙарынан «Буранбай» менән тамашаны башлап ебәрҙек. Ғәзизден әйтеүе буйынса, башҡорт көйҙәре илаһи моңға бик бай. Халыҡтың күңел матурлығы ярылып ята. Илебеҙҙең һәр мөйөшөндә башҡорт көйҙәрен ихлас күңел менән онотолоп тыңлайҙар, ти торғайны». Уның йырҙары Баку тамашасыларының иҫен китерә. Бакуҙар йәш башҡарыусыны баҫып алҡышлай. Ә концерттан һуң уға музыкаль спектаклдә ҡатнашырға тәҡдим итәләр. Был Ғөзәир Ғәджебәковтың «Аршин Мал-Алан» әҫәре булырға тейеш. Йәш йырсы спектаклдең дөйөм музыкаль органикаһын бик тиҙ үҙләштерә һәм уңышлы сығыш яһай. Уға Бакуҙа ҡалырға, музыкаль спектаклдәрҙең генә түгел, хатта опералырҙың да төп партияларын тәҡдим итәләр. Йырсы күңеленең иң түрендә генә тыуған төйәге Башҡортостанға ҡайтыу хыялы йәшәй, ул ҡалырға ризалыҡ бирмәй. Ошо йылдарҙа ул үҙе лә йыр яҙа башлай, опера яҙырға хыяллана. Йәнә Урта Азия, Себер, Башҡортостан, Татарстан, Волга буйҙарынан үтә, ауыл-ҡалаларҙа ҙур концерт программаһы менән сығыш яһай. Тиҙҙән ул операның бер нисә партияһын яҙа, уларҙы концерттарҙа үҙ репертуарына индерә. Был — Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың «Сания» операһы, либреттоһын да үҙе яҙа.

1923 йылда Ғәзиз Әлмөхәмәтов Урта Азия ҡалаларында хушлашыу концерттары бирә. Урта Азияны ул үҙенең икенсе Ватаны тип иҫәпләй, үзбәк милли мәҙәниәте остазы Хәмзә-заде Ниязиға ҡарата оло ихтирам һаҡлай. Һәр ерҙә — Ҡаҙағстандамы, Урта Азиялағы — уны көтөп алынған оло ҡунаҡ итеп ҡаршы алалар. Уның иҫ киткес тенор тауышы Бохара, Ашхабад, Сәмәрҡәнд, Бишкәк, Алма-Ата ҡалаларының иң яҡшы театр сәхнәләренән яңғырай.



*Ғ.Әлмөхәмәтов һәм С.Ғәбәши «Сания» операһын башҡарыусылар менән. Ҡазан, 1925 йыл.*

Ошо уҡ йылда композитор Ҡазанға күсеп килә. Бында ул композитор Солтан Ғәбәши менән таныша, уға үҙ операһын күрһәтә, кәңәш һорай. Ошонда уҡ рус музыканты Василий Виноградов менән дә аралаша башлай. Ҡазанда Ғәзиз Әлмөхәмәтов үҙенең операһын камиллаштырыу, яҡшыртыу өҫтөндә эшләй, музыканың халыҡсанлығын арттыра, башҡорт халыҡ көйҙәренә, моңдарына нигеҙләнә, 1925 йылдың башына операның яңы редакцияһы яҙылып бөтә.

Ҡазанда йәшәгәндә лә, бөтөнләй Башҡортостанға ҡайтҡас та уның репертуарында башҡорт халыҡ йырҙары төп урынды биләй. Ул һәр башҡорт йырының легендаһын, тарихын яҡшы белеп, башҡарғанда бөтә йөрәге, хис-тойғолары менән башҡорт халҡының рухын, күңел матурлығын, йырҙың боронғолоғон, мәҙәнилеген тамашасыға еткерергә, уны байытырға ынтыла.

Композиторҙа ғәйәт ҙур ойоштороу һәләтлеге була. Ул Ҡазан университетында, техникум, училищеларҙа уҡып йөрөгән башҡорт йәштәрен үҙ тирәһенә туплай. Һәр кемде һайлаған һөнәре буйынса ысын белгес булып сығырға өндәй. Йәкшәмбе көндәрендә уның фатирына тиҫтәләгән кеше йыйыла: кемдер ҡурайҙа уйнай, икенселәре йырлай, бергә сәнғәт хаҡында фекер алыша. Ә хужа үҙе ҡурайға ҡушылып йырлай. Уның моңло, үтә лә һағышлы йырын тыңларға Сәлих Сәйҙәшев, Солтан Ғәбәши, Һаҙый Таҡташ кеүек киң билдәле кешеләр килеп йөрөй.

1926 йылдың йәйендә Әлмөхәмәтов менән Ғәбәши, Василий Виноградов Өфөгә киләләр һәм үҙҙәренең уй-хыялдарын Мәжит Ғафури менән уртаҡлашалар. Мәжит Ғафуриҙың «Эшсе» поэмаһына опера ижад иткәндә улар күмәкләп Ижевск санаторийына баралар. М. Ғафури либретто өҫтөндә бик дәртләнеп эшләй. Был хаҡта Ғәзиз Әлмөхәмәтов былай ти: «Операның ауыл тормошон һүрәтләгән беренсе пәрҙәһен бик еңел яҙҙыҡ. Ә бына икенсе һәм өсөнсө пәрҙәләр бик күп баш ватырға мәжбүр итте. Шуға күрә Урал яғына китеп, Златоуст ҡалаһы заводтарына барып, уларҙың цехтарында, дөйөм ятаҡтарында эшселәр араһында йөрөргә, уларҙың тормоштарын, йырҙарын, станок тауыштарын өйрәнергә тура килде».

1929 йылда опера тамамлана. Ошо уҡ йылда Башҡортостандың ун йыллығына арнап Ғәзиз Әлмөхәмәтов «Башҡорт маршы»н яҙа. Ул Өфөлә бер оло оркестр тарафынан уйнала. Йырсы һәм композитор «Сания», «Эшсе» операларынан ариялар, башҡорт халыҡ йырҙарын башҡара. Шунда уҡ Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтовҡа Башҡортостандың халыҡ артисы исеме бирелә һәм ул Башҡортостанға бөтөнләйгә күсеп ҡайта.

1930 йылда «Эшсе» операһы сәхнәгә ҡуйыла. Музыкаль һәм опера театрҙары юҡ, шуға күрә әҫәрҙе ҡуйыу бик ҙур ауырлыҡтар, кәртәләр аша үтә. «Сания» операһында Зыя, «Эшсе»лә Нигмәт партияһын автор үҙе башҡара. Опера ҙур уңыш ҡаҙана, ваҡытлы матбуғатта бик күп мәҡәләләр баҫылып сыға.

Өфөлә Ғәзиз Әлмөхәмәтов алдында осоҡырыйы күренмәгән эш йәйелеп ята. Барлыҡ көсөн, һәләтен ул ятаҡан эшенә бирә. Иң тәүҙә ул П. И. Чайковский исемендәге Мәскәү Дәүләт консерваторияһында башҡорт студияһы асыу тураһында хыяллана. Республика өсөн сәнғәт белгестәре әҙерләү шуға бәйләнгән. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн ул Башҡортостан хөкүмәтенә мөрәжәғәт итә. Тиҙҙән консерваторияла башҡорт бүлеге асыла. Ә Ғәзиз Әлмөхәмәтов йыр-моңға, музыка ижад итеүгә һәләтле, талантлы йәштәрҙе эҙләү, табыу өсөн Башҡортостандың ҡала-ауылдарына сәфәргә сығып китә. Әсмә Шайморатова. Хәбир Ғәлимов, Баныу Вәлиева, Ғабдрахман Хәбибуллин, Хөсәйен Әхмәтов, Рәиф Ғәбитов, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Рәүеф Мортазиндарҙы һайлап, уларҙы Мәскәүгә уҡырға алып бара. Ошо йәштәрҙең йәшәү шарттары, ижади тормоштары менән әленән-әле ҡыҙыҡһынып ҡына ҡалмай, йыш ҡына уларға үҙ кеҫәһенән ярҙам күрһәтә. Йәй көндәрендә каникулға ҡайтҡанда уларҙы үҙе менән гастролдәргә йөрөтә. Халыҡ артисы менән концерттарҙа бергә сығыш яһаған Зәйтүнә Илбаева иҫтәлектәрендә түбәндәгеләрҙе яҙған: «Ғәзиз ағай тышҡы ҡиәфәте менән бик мөләйем, һөйкөмлө кеше булыуы менән генә түгел, кешелеклеге менән дә айырыуса үҙенсәлекле ине. Йомшаҡ тәбиғәтле, үҙенән йәшерәктәргә, түбәнерәктәргә кеселекле, ихтирам менән мөрәжәғәт итә. Юғары мәҙәниәтле, үрнәк булырҙай кеше ине...»

Ғәзиз Әлмөхәмәтов башҡорт халыҡ йырҙарын фонографҡа яҙыу өсөн дә бик күп көс һала. Уның ярҙамында башҡорт халыҡ йырҙары яҙылған пластинкалар сыға. Ул үҙ эшенә, тормошҡа ҙур ынтылыш, өмөттәр менән ҡарай, республика көнкүрешендә булған һәр ваҡиғаны иғтибар менән күҙәтә, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Ул башҡорт музыка сәнғәтенең киләсәген асыҡ күрә, күҙаллай. 1933 йылда донъя күргән «Башҡорт музыка сәнғәте өсөн көрәш юлында» тигән хеҙмәтендә композитор музыка мәҙәниәте торошон ентекле тикшерә, уның үҫеш юлдарын күрһәтә.

Архивта Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың партия өлкә комитеты секретары Быкинға тәғәйенләнгән хаты һаҡланып ҡалған. Хат 1934 йылдың 29 июнендә яҙылған. «Мәскәүҙә П.И. Чайковский исемендәге консерваторияла башҡорт бүлеген асыу — ул кадрҙар әҙерләү мәсьәләһенең бер генә өлөшө», — тип яҙа бөйөк йырсы. Музыкаль техникумда хор-балет курстары, 1937 йылда музыкаль театр асыу, буласаҡ юғары квалификациялы белгестәр өсөн 1935 йылда уҡ торлаҡ төҙөй башлау, хәҙер үк симфоник оркестр ойоштороу, музыкаль техникум яҡшы белемле кадрҙар әҙерләһен өсөн балалар музыка мәктәптәрен асырға кәрәклеге, музыка буйынса уҡыу әсбаптары, музыка уйын ҡоралдарының етерлек кимәлдә булмауы һәм шулай уҡ ауыл клубтары өсөн белемле кадрҙар әҙерләү тураһында яҙа ул үҙенең хатында. Шулай уҡ башҡорт халыҡ йырҙарын ноталары менән баҫып сығарыу, композиторҙарҙың әҫәрҙәрен, бигерәк тә заман талаптарына яуап бирерлек йырҙарҙы баҫыу тураһында ҡайғырта.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов «Салауат» һәм «Шәрәфетдин ҡасҡын» операларын ижад итергә планлаштыра. Сәләх Кулибайҙың пьесаһы буйынса комик опера өҫтөндә эшләй башлай. 1936 йылдың йәйендә ауылдарҙы хеҙмәтләндереү өсөн концерт бригадаһы ойоштора һәм 55 концерт бирә. Ул башҡорт музыка сәнғәтенең киләсәген асыҡ күҙ алдына баҫтыра. Ғәзиз Әлмөхәмәтов тәүгеләрҙән булып башҡорт музыкаль балладаһын ижад итә. Ул «Әсе елдәр» тип атала. Ошо әҫәрендә композитор үҙенең әсә яҙмышын һиҙемләгәндәй була.

Ғәзиз Сәлих улының ҡыҙы Роза апайҙың иҫтәлектәренән: «Минең атайым эсмәне лә, тартманы ла. Уның иң яратҡан ашы бишбармаҡ ине; үҙе бик яҡшы итеп үзбәк былауын әҙерләй ине — Ташкентта йәшәүҙең һөҙөмтәһелер инде. Ғөмүмән, бик алсаҡ һәм күңелле кеше ине. Барыһы менән дә уртаҡ тел таба белә. Беҙгә йыш ҡына яҙыусылар, артистар, музыканттар килә торғайнылар: Бәҙәр Йосопова, Ғималетдин Минһажев, Ғәлимйән Ҡарамышев, Тәлиғә Бикташева, Мәжит Ғафури, Мөслим Марат, Булат Ишемғолов, Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый һ.б...»

Бөйөк йырсы, композитор 1937 йылдың декабрендә Үзбәкстанға гастролдәргә китергә тейеш була. Афишалар Ташкент ҡалаһында инде эленеп ҡуйылған.

«Атайымды 1937 йылдың 12 декабрендә ҡулға алдылар. Ул гастролдәр менән Ташкентҡа китергә тейеш ине, хатта поезға билет та алынғайны. Миңә ул саҡ 13 йәш кенә ине. Төндә өйҙә тентеү яһап, атайымдың ҡулы менән яҙылған нотaларҙы аяуһыҙ тапанылар. Ҡулға алырға килеүселәрҙе шундай арҙаҡлы йырсы һәм композиторҙың шул тиклем ябай йәшәүе аптыратты. Өйөбөҙҙә пианино менән фисгармондан башҡа бер ниндәй ҙә байлыҡ юҡ ине. Атайымды алып киткәс, беҙ әсәйем менән илай-илай вәхшиҙәрсә тапалған нотaларҙы йыйҙыҡ. Икенсе көндө фисгармонь менән пианиноны ла алып киттеләр. Бер нисә айҙан әсәйемде лә ҡулға алдылар. Мине буласаҡ композитор Нариман Сабитовтың ғаиләһе үҙҙәренә һыйындырҙы. Әсәйемде алты айҙан сығарҙылар. Уны танырға мөмкин түгел ине: бөтә тәне сиҡан менән ҡапланған, ауырлығы бөтәһе 40 килограмм. Ныҡ сырхау булғанға, уға Өфөлә ҡалырға рөхсәт иттеләр», — ти бөйөк шәхестең ҡыҙы Роза апай Әлмөхәмәтова-Латыпова.

Ғәйепләү документы өс кенә бит һәм бер генә фекер: «Халыҡ йырҙарын башҡарып, һеҙ халыҡ-ара мөнәсәбәтте киҫкенләштергәнһегеҙ»... «Атайым Стәрлетамаҡ ҡалаһында Әхмәтзәки Вәлиди хөкүмәте ағзалары алдында ике тапҡыр сығыш яһаған икән...» — тип өҫтәп ҡуйҙы ҡыҙы.

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың башҡарыу оҫталығы тураһында Ғәзим Шафиҡовтың атаһы Ғәзиз ағай былай тип әйткән: «Әлмөхәмәтовтың тауышы шунда уҡ күңелде солғап ала һәм аҙаҡҡы өнгә тиклем ебәрмәй ине.

Унын башҡарыуын тыңлағанда бер нәмә генә уйлайһың: был тамаша бөтә күрмәһен, йырлаһын да йырлаһын ине ул... Ә инде йырсы «Урал» йәки «Сибай»ҙы башҡарғанда илағылары килә. Уның тауышы йөрәктәргә үтеп инә һәм унда мәңгегә ҡала. Шундай матур ирҙәр тауышын уға тиклем дә, унан һуң да минең ишеткәнем булманы. Ә ул «Ниғмәт йыры»н башҡарғанда стеналар әллә тетрәнә, әллә яңғырай башлайҙар кеүек. Йырсының тауышы залға һыймай, тышҡа артыла. Ә ундай юғары нотаны бер генә ҡатын-ҡыҙ йырсы ла ала алмайҙыр ул».

Ә бына Заһир Исмәғилевтың фекере: «Ғәзиз ағай бер кем дә башҡара алмағанса йырлай ине. Ул үҙенсәлекле, үҙенә генә хас алымда башҡара ине...»

Бөйөк башҡорт йырсыһы төрмәлә ярты йылдан ашыу ултыра. Ошо ваҡыт эсендә уны вәхшиҙәрсә язалайҙар, мыҫҡыллайҙар, кәмһетәләр. Ләкин бында ла бөйөк шәхес бөйөк булып ҡала, ул көн һайын тиерлек үҙе кеүек һәләкәткә осраған бәхетһеҙҙәрҙең һорауы буйынса үҙенең һәм халыҡ йырҙарын башҡара. Тыңлаусыларҙың күҙҙәренән әсе йәштәр аға. Хатта һаҡсылар ҙа шауламаҫҡа тырышып, әсирҙе таң ҡалып тыңлайҙар. Иреккә ҡыҙына Ғәзиз ағай бер нисә бәләкәй генә хат яҙып ебәрә. Уларҙа: «Ҡайғыға бирешмә. Йәшәү өсөн көрәш! Кеше бул», — тигән юлдар бар.

Уның менән бер камерала ултырған, аҙаҡ егерме йылдан ашыу ғүмерен лагерҙарҙа һәм һөргәндә үткәргән шағир Мөслим Марат Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың һуңғы юлға Ниғмәт арияһы менән китеүен иҫкә ала.

Тауҙар ватып таштар аҡтарғанда,
Һеҙ булырһыҙ минең күңелемдә,
Эштән арып ялдар иткән саҡта,
Булырһығыҙ минең телемдә.

Ай, диңгеҙгә барып төшә икән
Боролоп-боролоп аҡҡан ағым һыу,
Рәхәт ине бергә торған саҡтар,
Айырылышыу бигерәк яманһыу!

Шул заманда Өфө төрмәләренең береһендә эшләгән ҡанэскес әҙәм үҙенең тәүҙә Ғәзиз Әлмөхәмәтовты «Урал» йырын йырлатып, шунан ғына алып сығып атыуы тураһында маҡтанып һөйләгән.

1938 йылдың 2 июлендә бөйөк шәхестең ғүмере мәңгегә өҙөлә. Тиҫтәләрсә йылдар буйы беҙ ошо бөйөк кешенең ижадын да белмәй, йыр-моңдарын да ишетмәй үҫтек. Тик 1957 йылда ғына уның исеме халыҡҡа ҡайтарып бирелде. Тыуған төйәге Мораптал ауылында уның исемен йөрөткән музей асылды. Йыл һайын тиерлек уның исеменә арналған конкурстар үткәрелеп тора. 100 йыллыҡ юбилейы Морапталда һәм Өфөлә бик киң билдәләнеп үтте. Халыҡ күңелендә Ғәзиз Әлмөхәмәтов образы бер ҡасан да юғалмаған. Мораптал ауыл клубында Ғәзиз ағайҙың ҡыҙы Роза, Баныу Вәлиева, Фәриҙә Ҡудашева апайҙарҙың сығыштарынан һуң минең күңелгә шундай шиғри юлдар килгәйне:

Төрмә эсе аһ-зарҙарға тулған,
Ҡапыл бары ҡалды туҡталып,
Күңелдәрҙе сыйып йыр урғылды,
Йөрәктәргә бөтмәҫ моң һалып.

Тән яралы, йырсы язаланған,
Ҡанэскестәр ярһып туҡмаған.
Тик барыбер йырлай, көй ағыла,
Йөрәккәйе батыр, ҡурҡмаған.

Язаланған тән һыҙлана, һыҡтай,
Ишектәрҙә келә, һаҡсылар.
– «Урал» йырын йырла, башҡорт! – тиеп
Көлөп мыҫҡылланы, шаштылар.

– Аһ, Ғәзизем, һин бит бөйөк артист,
Һаҡла тауышыңды, ҡәҙерлем!
– Әсәй, әсәй, ҡулдарымда бығау,
Үргә артылырға әҙермен!

Ҡош булһамсы, аһ, булһамсы ҡошсоҡ –
Талпынырға күккә, иреккә!..
Атыу яңғыраны, йән өҙөлдө,
Моң артылды зәңгәр киңлеккә!

Артылды ла зәңгәр киңлектәргә,
Ҡабат ҡайтты аһәң, саз булып.
Беҙҙең күңелдәрҙә ҡалды йырың
Мәңге ҡабатланмаҫ яҙ булып!